**Мин- уҡытыусы**

Эссе.

“Һин уҡытыусым шундай наҙлап

Ҡараның күҙҙәремә...”

- тип йырлай уҡыусым Храмцова Ирина. Уның шулай башҡорт телендә йырлауы миңә күпме ҡыуаныс һәм ғорурлыҡ хисе килтереүен аңлаймы икән?..

Мин бәхетле... Эйе, бик бәхетле! Сөнки мин - уҡытыусы. Ә уҡытыусы – донъя йөҙөндә иң мөһим һөнәр. Киләсәк быуын яҙмышы тик улар ҡулында. Уларярҙамында яңы кешеләр, яңы асыштар, яңы даһиҙар тыуа.

Ә ни өсөн мин уҡытыусы һөнәрен һайланым һуң? Уҡытыусы булыуы миңә оҡшай: онотолоп китеп нимәлер һөйләү, мөкиббән китеп үҙ фекереңде яҡлау, аңлашылмаған нәмәләрҙе аңлатыу, йә булмаһа уҡыусыларға ҡушылып ябай ғына нәмәләрҙән дә ҡыҙыҡ табып көлөү - барыһы ла, барыһы ла йәнемә яҡын! Балалар күңеле бит бай һәм күп яҡлы. Улар менән бер тиңдә аралашыу, серләшеү ситтән ҡарағанда, кемгәлер ят күренеш тойолалыр. Ә миңә рәхәт...

Уҡытыусы - ябай һөнәр түгел. Ысын уҡытыусы һәр ваҡыт мәктәп тормошонда ҡайнап йәшәй. Мәктәп башҡа ойошмаларға ҡарағанда бөтә яҡлап та бер аҙымға алға бара: яңы быуын, яңы асыштар, яңы үрҙәр. Бер ваҡытта ла бер урында тапанмай: уҡый, өйрәнә, күҙәтә, уйлана, эҙләп таба. Эйе, бик ауыр , ҡыйын саҡтар ҙа була. Ошо ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сығып, йәшәү тәмен аңлайһың! Нисек кенә булмаһын, ауырлыҡтар онотола, уҡытыусы ла тәжрибә туплай, шымара. Ауырлыҡтар алдында һынмаған, үҙ һөнәренә тоғро ҡалған, балаларҙы һәм үҙ эшен һөйгән ысын уҡытыусылар ғына ҡала. Был шулай!

Уҡытыусы һөйләүе, үҙен тотошо, йәшәү рәүеше, хатта кейгән кейеме менән дә балаларға һәр ваҡыт өлгө булырға тейеш. Тырыш уҡытыусы ғына үҙ балаларында ныҡышмаллыҡ сифаттарын тәрбиәләй ала. Ошо сифаттар мине ғүмерем буйы алға әйҙәп йөрөнө. Мин тырыш колхозсы ғаиләһендә алтынсы төпсөк бала булып донъяға килгәнмен. Бәләкәйҙән китап уҡырға яраттым. Китапханасының: “Айгөл, һин уҡымаған китап ҡалманы”,- тигәненә ныҡ көйгәнем бөгөнгөләй хәтеремдә. Атайымдың: “Ағай – апайҙарың береһе лә университетта уҡыманы, барыһы ла бына тигән донъя көтә”,- тип Өфөгә китеүемә ҡаршы булыуына ҡарамаҫтан, илап-илап имтиханға әҙерләндем. Башҡорт дәүләт педагогия университетын ҡыҙыл дипломға тамамлауым - атайым өсөн ғорурлыҡ булды.

Башҡорт теле нескәлектәренә, уҡытыу серҙәренә төшөндөрөүсе асыҡ йөҙлө, ихлас күңелле, уҡытыусыларҙың эталоны булып торған М.С.Дәүләтова, Л.Х. Сәмситова, Ә.Х. Вилданов, Ә.Х. Дәүләтколов, В.З.Толомбаев һәм В.Ә. Шәйәхмәтовтарға мәңге рәхмәтлемен. Уларҙың

ярҙамы менән  15 йылдан ашыу инде,  көн дә миңә ышаныс менән баҡҡан күҙҙәргә ҡарап, балалыҡ илендә йәшәйем, уларға туған теле- башҡорт телен өйрәтәм. Был илдә булған бөткөһөҙ дәфтәрҙәр ҙә, туктауһыҙ гөрләгән балалар тауышы ла, тәүлек әйләнәһенә  һүнмәгән компьютер мониторы ла, асыҡ дәрестәргә әҙерләнеп үткәргән йоҡоһоҙ төндәр ҙә ҡурҡытмай мине. Сөнки мин үҙемдең алдыма ҡуйған маҡсатыма ирештем. Уҡыусыларымдың эскерһеҙ күҙҙәре лә, бәләкәй генә уңыштары ла, туған телдәрендә әйткән һәр һүҙе лә ҡыуандыра мине. Мәктәп - ул минең яҙмышым. Мин бында йөрәгем ҡушыуы буйынса килдем. В.О. Ключевскийҙың “Үҙегеҙ уҡытҡан предметты һәм уҡыусыларғыҙҙы яратығыҙ” – тигән һүҙҙәре  минең тормош девизыма әүерелде. Балаларҙы һәм үҙ фәнеңде яратмай, ысын уҡытыусы булып булмай икәненә төшөндөм. Яратыу-тимәк аңлау, ярҙам итеү, уларҙы алға әйҙәү. Һин бала менән нисек  мөғәләмә итәһең , ул да һиңә шулай яуап ҡайтара. Көсләп тағылған белем-бер көнлөк, күңел биреп өйрәнгәне-мәңгелек.

Уҡытыусы 45 минут дәрес аңлата ла, шуның менән эше бөтә, тип яңылыш фекер йөрөткән кешеләр ҙә бар. Ә бит уҡытыусы тәүлегенә уҡытыусы: өйҙә лә, урамда ла, ҡунаҡта ла , хатта интернет селтәрендә лә. Уның  бөтә ғүмере - дәрес.  Бына, дәрес бөткәнен белдереп, ҡыңғырау шылтыраны, тик минең өсөн ул бөтмәне әле. Уҡыусылар икенсе дәрескә китмәҫ элек шатлыҡлы хәбәрҙәре менән уртаҡлашып ҡалайыҡ тип, һырып алалар ҙа, ярышып хәбәрҙәрен һөйләй башлайҙар. Береһе лә таралырға ашыҡмай: кемдер көндәлеген “5” менән тултырырға ашыға, кемдер килеп ҡосаҡлай, дәрескә рәхмәт әйтә, кемдер башҡорт теле дәрестәре тиҙ үтеүенә зарлана. Уларҙы оҙатыуға, коридорҙың икенсе осонан уҡ: “Беҙ  киләбеҙ!”,-тип һөрәнләп йүгереп килгән балаларҙы ҡаршылағанда ниндәй изге һөнәр ул - уҡытыусы, тип ҡыуанам. Изге, сөнки ул күпме баланың яҡын кешеһе. Ул бит балаға белем генә түгел, ә күңел йылыһын да бирә, тормошҡа әҙерләй.

“Һеҙ бит уларҙың икенсе әсәһе”,-ти ата-әсәләр. Бәлки шулайҙыр ҙа. Мин бит уларҙы үҙ балаларым кеүек яратам. Мәктәпһеҙ, уҡыусыларһыҙ тормошомдо күҙ алдыма ла килтерә алмайым. Улар төрлө, шулай ҙа һәр береһе ҡәҙерле, яҡын. Улар бит минең дәресемде һайлап алғандар. Яңы закон буйынса ата-әсәләр балаһына ҡайһы туған телде уҡытырға һайлап ала. Шуға ла мин улар менән бар күңелемде биреп эшләйем, төрлө яңы алымдарҙы дәресемдә ҡулланам. Уның менән генә сикләнеп ҡалмай, төрлө сараларҙа ҡатнаштырам, конкурстарға, ярыштарға әҙерләйем, йырлатам, бейетәм, музыка ҡоралдарында уйнарға өйрәтәм.

Ҡыҙғаныска ҡаршы, араларында үҙ туған телен һайламаған башҡорт балалары ла  бар. Уларға  ла битараф ҡала алмайым. Һәр ҡайһыһының күңелендә туған телгә ҡарата йылы хистәр тыуҙырыу -  минең эш, тип һанайым. Бала күңеле -  аҡ ҡағыҙ кеүек саф. Ул әле киләсәге тураһында уйларға белмәй. Ыңғайы тура килгән һайын ата-әсәләр менән әңгәмәләшәм, йыйылыштарҙа, конференцияларҙа сығыш яһайым, телебеҙҙең, халҡыбыҙҙың

киләсәген уйларға, балаларҙы туған телдәренән мәхрүм итмәҫкә өндәйем. Кемгәлер аңлатыу эше этәргес көс булып тора.

Эйе, туған телем - иркә гөлөм, бөгөн минең ярҙамыма мохтаж. Ата-бабаларыбыҙ ҡалдырған телебеҙҙе бөтөрмәү, уны киләсәк быуынға тапшырыу - минең изге бурысым. Ниндәй генә ҡыйын булғанда ла бирешмәҫкә тырышам. Сөнки мин был донъяға туған телемде яҡлаусы, һаҡлаусы булып тыуғанмын һәм ошо оранымa һәр ваҡыт тоғро ҡаласаҡмын. Кемдер шағир, кемдер йырсы, кемдер ғалим, йә журналист. Уларҙың барыһы ла туған телде үҫтереүгә үҙ өлөшөн, көсөн һала. Ә мин - уҡытыусы. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы. Ә ул инде - шағир ҙа, йырсы ла, ғалим да, оратор ҙа. Башҡорт теле уҡытыусыһы бер ваҡытта ла ябай уҡытыусы булып ҡала алмай. Үҙ дәресе менән генә ҡайнаған уҡытыусы - тел һаҡсыһы була алмай. Бар яҡлап та өлгөр булһа ғына, бөйөк маҡсаттарға ирешә кеше. Ҡайһы берәүҙәр аптырап: "Ә һин барыһына ла нисек өлгөрәһең?- тип һорай. Өлгөрәм. Ғаиләмә лә, уҡытырға ла, балаларҙы конкурстарға әҙерләргә, төрлө саралар үткәрергә, ата-әсәләр менән эшләргә, төндәрен ижад итергә, башҡорт фольклор түңәрәген етәкләргә, бейеү түңәрәгенә йөрөргә лә өлгөрәм. Сөнки мин башҡорт теле уҡытыусыһы! Ваҡыттың ҡәҙерен белеү - ул беҙҙең ҡаныбыҙҙа. Мин бит яңы быуын тәрбиәләйем. Яңылышырға, ялҡауланырға, туған телебеҙ аяныс хәлдә булғанда ҡул ҡаушарып ултырырға хаҡым юҡ. Мин бәләкәй генә көрәшсе. Битарафлыҡ кире ҡайтара алмаҫлыҡ юғалтыуҙарға килтерәсәк. Миңә бит күпме күҙ ышаныс менән ҡарай. Мин дә уларға ышанам. Барыһы ла яҡшы буласаҡ.

Байышева Айгөл Ғалимйән ҡыҙы